“Бөтә донъя башҡорттар ҡоролтайы”

- Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы йүнәлеш: һаулыҡ.

# Эскелеккә ҡаршы бергәләп көрәшәйек!

**Автор:**
**Шаһиев Фәнүр Фәнит улы,**
**Башҡортостан,**
**Учалы районы, Һәйтәк ауылы.**

**2019 йыл.**

## Эскелек сәбәптәре:

-Дәүләт иғтибары юҡ, тейешенсә саралар күренмәй,

- Рәсәйҙә бөтәһе лә эсә тигән стереотип,
- эшһеҙлек,
- буш ваҡыт күп, шөғөл юҡ,
- эскән мөхит,
- кинолар, рекламалар,

- осһоҙ контрафакт спирт,
- магазиндар иртәнге сәғәт 6 алып киске 23.00 тиклем һата ала,

- араҡы, пиво, джин-тониктар һатҡан магазиндар күп.

- мәжлестәрҙе спиртлы эсемлектәрһеҙ үткәреү күңелһеҙ тигән стереотип,
- - мәжлестәрҙе спиртлы эсемлектәрһеҙ үткәреү йолалары киң таралмаған,

## Эскелеккә ҡаршы көрәшеү юлдары:

1) эскелеккә ҡаршы Дәүләт сәйәсәте алып барылырға тейеш. Рәсәй халҡын һаҡлап ҡалыуға программалар булдырыу.
2) контрафакт спирт һатҡан нөктәләрҙе ябыу.
3) спиртлы эсемлектәр һатҡан магазиндарҙы кәметергә, ваҡытын сикләргә (18-22 сәғәттә генә), 21 йәштән өлкәндәргә генә һатырға. Ҡала Советтарына спиртлы эсемлектәрҙе һатҡан нөктәләрҙе йәмәғәт урындарынан (мәктәп, балалар баҡсаһы һб) 300м тиклем йыраҡайтырға тип ҡарарҙар сығарыу.
4) Балаларға, үҫмерҙәргә спиртлы эсемлектәрҙе һатҡан магазиндарға ҙур штрафтар (100-500 мең һум) һалырға, лицензияларҙы тартып алырға. Балаларға, үҫмерҙәргә спиртлы эсемлектәр эсергән йә улар менән бергә эскән өсөн оололарҙы Уголовный кодекс буйынса хөкүм итергә.

5) эсмәгән мөхиттәр, ауылдар булдырыу, ҙурайтыу.
6) ауылдарға иғтибарҙы көсәйтергә (бигерәк тә төпкөл). Ауыл Советтарына спиртлы эсемлектәрҙе һатҡан нөктәләрҙе йәмәғәт урындарынан (мәктәп- клуб һб) 500м тиклем йырағайтырға тип ҡарарҙар сығарырға.
7) яңы эш урындарын булдырыу
8) буш ваҡытты файҙалы үткәрергә: спорт, түңәрәктәр һб. шөғөлдәр менән. Балалар өсөн бушлай түңәрәктәрҙең күп булыуы.
9) балалар баҡсаһы, мәктәп, клубтар айыҡ тормош өсөн эш алып барырға тейеш.

- 10) ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар клубтары йәштәр менән эш итеүен көсәйтеү.
  11) мәсет никах, аят уҡытҡанда, исем ҡушҡанда айыҡ тормош тормош тураһында вәғәздәр һөйләү.
- 12) Эскелеккә ҡаршы көрәшеү бөтә Рәсәй халыҡтарының дөйөм эше булырға тейеш. Был сирҙе бергә генә еңә алабыҙ.